# ЯҢЫ ЙЫЛ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

**Бисмилләһир-рахмәнир-рахим!**

Тағы ла бер йылыбыҙҙы тәүәлләп, беҙ уны тарих төпкөлөнә оҙатып ҡуйҙыҡ. Үкенесле булмағандыр ул, һәр ваҡыттағыса беҙ уның үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Ҡыуаныстарыбыҙ күңелдәрҙә арбап торҙо, сәләмәтлегебеҙ тәнебеҙҙә тороп ҡалды, өмөттәребеҙ аҡланып, эш көндәребеҙ тырышлыҡ, байрамдарыбыҙ күңел көрлөгө менән үтте.

Ауыл-ҡалаларыбыҙҙы танымаҫлыҡ дәрәжәлә төҙөкләндерәү менән бергә уларҙа көмөш айлы манаралар күберәк күтәрелә башланы. Һуңғы йылдарҙа тапҡан кимәттәребеҙҙең иң ололары, бәлки, донъялар именлеге менән ана шул иманға ҡайтыу булғандыр...

"Һәр көндә - бигерәк тә йома көндәрен - мосолман Аллаһты зекер итеп, пәйғәмбәребеҙ рухына Уның фатихаһын теләп башлаһа һәм: "Үҙенән башҡа бер илаһи булмаған мәңге тере, мәңге йәшәүсән Аллаһ алдында тәүбә итәм", - тип өс тапҡыр ҡабатлаһа, бәндәнең диңгеҙ өҫтөндәге ҡүбек кеүек күптәнге гонаһтарын да ярлыҡамай ҡалмаҫ ти.

Шуға ла юлға сыҡҡанда, сәфәрҙәрҙә үрҙәргә үрләгәндә мосолман: "Аллаһу Әкбәр!" - Аллаһ бөйөк; уйҙыу ерҙәргә төшкәндә: "Сүбхәнәл" - Аллаһка дан! - тип әйтһен, ти Китап.

Аллаһы Тәғәлә һәр беребеҙгә һаулыҡ, сәләмәтлек, изгә эштәребеҙҙә уңыштар, илкөн тыныслығы, милләт-ара татыулыҡ, бәхет-сәғәҙәт насип итһен.

## Дин үә заман

Сәләх СУҠБАЕВ

**1 ғинуар - Эске Рәсәй мосолмандарының рәсми рәүештә ислам динен ҡабул итеү көнө (922 миләди йыл - 310 һижри йыл)**

Үткән йылдар менән сағыштырғанда бөгөн беҙгә динебеҙҙе, дин ҡанундарын төрлө яҡлап өйрәнеү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар.

Изге Китабыбыҙ - Ҡөрьән булмаған өйҙәр ҙә аҙайып барһа булһа кәрәк. Сөнки унда Исламдың дөйөм һәм төп нигеҙҙәре тупланған. Уны уҡырға, өйрәнергә, Ҡөрьән хөкөмдәре менән йәшәргә ваҡыттыр.

Ҡөрьән - беҙҙә, ғәҙәттә инеп киткәнсә, мәрхүмдәрҙе ерләп йөрөү өсөн генә индерелмәгән. Ғүмер итеү, донъя көтөү өсөн ул - дәреслек.

- Аллаһы Тәғәләнең пәйғәмбәрҙәр ебәреп тороуындағы төп маҡсаты, - тип яҙа шәйех Рауил Гәйнетдин "Ислам мөнбәре" гәзитендәге вәғәздәрендә, - бәндәләрҙе быны ошо изге Ҡөрьәнгә, дин ҡануны, Ҡөрьән хикмәттәренә өйрәтеү, халыкты рухи наҙанлыктан коткарыу.

- Әгәр ҙә кеше фән ҡаҙаныштарын тәрән һәм төплө итеп үҙләштерә алһа, уны тормошта ҡуллана ла белә башлаһа, - тип дауам итә имам, - уның эске донъяһы ла иман нуры менән яктырып тора башлаясак. Башкаса булғанда диндә өйрәнеүҙән мәғәнә ҡалмай.

Элекке заманда уҡ Ҡөрьән халыҡ күңеленә ғилем нуры булып ингән.

Диндең ниндәй сифаттары һуң әле беҙ йәшәгән XXI быуатта ла иманлы бәндәләр алдына тормош ҡуйған әллә ниндәй ҡатмарлы мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итергә мөмкинлек бирә һәм дин булараҡ Исламды юғары кимәлдә тоторға ярҙам итә.

Быға яуап үтә лә ябай: Ислам - ул бәндәнең Әхирәт хаҡында туктауһыҙ хәстәрлек күреп кенә тороуынан башлап, тормошҡа ҡарата булған һөйөүенә тиклем бөтә булмышын күҙ уңынан төшөрмәй торған игелекле дин.

Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, кешенең ерҙә йәшәп үткән тормошона баһа биргәндә Аллаһ уның дин хөкөмдәрен - бойороуҙары һәм тыйыуҙарҙы ғибәҙәт булараҡ үтәп барыуын ғына күҙ уңында тотмай, мосолмандың донъя менән бергә йәшәгәндәр араһындағы абруйы, ижтимағи тормоштағы урыны, әҙәбе, тыуған илде һөйә белеүе, уны яҡлау өсөн һәр ваҡыт әҙер тороуы - бөтәһе лә иғтибарға алынасаҡ.

Донъя тормошонда уңышҡа өлгәшеү - мосолмандың Аллаһ ҡаршыһындағы төп вазифаһы.

Мосолман тигәндә беҙ, әлбиттә, заманға ярашлы белем кимәле, тормош тәжрибәһе, уйлана белеү һәләте һәм аҡыл, хикмәт эйәһе булған кешене күҙ уңында тотабыҙ.

**Илһам**

## Битараф булмыйк

Мауза АМИНЕВА

Тормош авыр диеп зарланабыз
Булды микән аның җиңеле,
Җиңел тормышларны эзли-эзли
Дучар булып йөри күбесе.

Җиңеллекне эзләп табалмыйча
Үз-үзенә куллар салалар
Шушы гүзәл доньялардан ям
табалмый
Кара гүргә кереп яталар.

Күңеленә үзең хужа булып
Сабырлыклар сорап Ходайдан
Изге ниятләрне күберәк кыл
Ям табарсың шунда доньяңнан

Байлыгыңны учларыңа йомып
Хәер бирүдән да кызганып
Үлгән туганнарын ислэмичә
Бәндәм йөри гомер уздырып

Мәчет ишегенең кай ягынан
Ачылганын хәтта белмичә,
Бүгенге көн белән яши бәндәм
Алда киләчәген күрмичә

Бу доньяга туганбыз бит бары
Ходай кушканнарны үтәргә,
Вакыт житкәч качып калып булмый
Туры килә кире китәргә.

Битарафлар булмыйк доньялыкта
Әҙер булыйк кире китергә
Һәр беребез хәлдән килгәнгечә
Тырышаек Ходай кушканнарны
үтәргә.

### Өфөлә намаҙ ваҡыты

**Мөхәррәм — 30 көн 2009 миләди йыл**
**1430 һижри йыл.**

| Мөхәррәм Сәфәр | Аҙна көндәре | Ғинуар | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә нам. | Икен. нам. | Аҡшам. намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 | Йома | 1 | 08.10 | 09.40 | 13.30 | 15.30 | 17.00 | 18.30 |
| 17 | Шәмбе | 2 | 08.10 | 09.40 | 13.30 | 15.31 | 17.01 | 18.31 |
| 18 | Йәкшәмбе | 3 | 08.09 | 09.39 | 13.30 | 15.32 | 17.02 | 18.32 |
| 19 | Дүшәмбе | 4 | 08.09 | 09.39 | 13.30 | 15.34 | 17.04 | 18.34 |
| 20 | Шишәмбе | 5 | 08.09 | 09.39 | 13.30 | 15.35 | 17.05 | 18.35 |
| 21 | Шаршамбы | 6 | 08.08 | 09.38 | 13.30 | 15.36 | 17.06 | 18.36 |
| 22 | Кесе йома | 7 | 08.08 | 09.38 | 13.30 | 15.38 | 17.08 | 18.38 |
| 23 | Йома | 8 | 08.07 | 09.37 | 13.30 | 15.39 | 17.09 | 18.39 |
| 24 | Шәмбе | 9 | 08.06 | 09.36 | 13.30 | 15.41 | 17.11 | 18.41 |
| 25 | Йәкшәмбе | 10 | 08.06 | 09.36 | 13.30 | 15.43 | 17.13 | 18.43 |
| 26 | Дүшәмбе | 11 | 08.05 | 09.35 | 13.30 | 15.44 | 17.14 | 18.44 |
| 27 | Шишәмбе | 12 | 08.04 | 09.34 | 13.30 | 15.46 | 17.16 | 18.46 |
| 28 | Шаршамбы | 13 | 08.03 | 09.33 | 13.30 | 15.47 | 17.17 | 18.47 |
| 29 | Кесе йома | 14 | 08.02 | 09.32 | 13.30 | 15.49 | 17.19 | 18.49 |
| 30 | Йома | 15 | 08.01 | 09.31 | 13.30 | 15.51 | 17.21 | 18.51 |
| 1 | Шәмбе | 16 | 08.00 | 09.30 | 13.30 | 15.52 | 17.22 | 18.52 |
| 2 | Йәкшәмбе | 17 | 07.59 | 09.29 | 13.30 | 15.54 | 17.24 | 18.54 |
| 3 | Дүшәмбе | 18 | 08.58 | 09.28 | 13.30 | 15.56 | 17.26 | 18.56 |
| 4 | Шишәмбе | 19 | 07.57 | 09.27 | 13.30 | 15.58 | 17.28 | 18.58 |
| 5 | Шаршамбы | 20 | 07.55 | 09.25 | 13.30 | 16.00 | 17.30 | 19.00 |
| 6 | Кесе йома | 21 | 07.54 | 09.24 | 13.30 | 16.02 | 17.32 | 19.02 |
| 7 | Йома | 22 | 07.53 | 09.23 | 13.30 | 16.04 | 17.34 | 19.04 |
| 8 | Шәмбе | 23 | 07.51 | 09.21 | 13.30 | 16.06 | 17.36 | 19.06 |
| 9 | Йәкшәмбе | 24 | 07.50 | 09.20 | 13.30 | 16.08 | 17.38 | 19.08 |
| 10 | Дүшәмбе | 25 | 07.48 | 09.18 | 13.30 | 16.09 | 17.39 | 19.09 |
| 11 | Шишәмбе | 26 | 07.47 | 09.17 | 13.30 | 16.11 | 17.41 | 19.11 |
| 12 | Шаршамбы | 27 | 07.45 | 09.15 | 13.30 | 16.13 | 17.43 | 19.13 |
| 13 | Кесе йома | 28 | 07.44 | 09.14 | 13.30 | 16.16 | 17.46 | 19.16 |
| 14 | Йома | 29 | 07.42 | 09.12 | 13.30 | 16.18 | 17.48 | 19.18 |
| 15 | Шәмбе | 30 | 07.40 | 09.10 | 13.30 | 16.20 | 17.50 | 19.20 |

## Иман йорто асылды

Р. СОБХАНҒОЛОВ

**29 ноябрҙә, Ҡорбан байрамының өсөнсө көнөндә, Күгәрсен районының Үрге Биккужа ауылында өйлә намаҙы алдынан мәсет асыу тантанаһы булды.**

Үрге Биккужала мәсет элек тә булған. Уның урынында бынан өс йыл элек социаль-мәҙәни үҙәк ҡалҡып сыҡты. Яңы мәсеткә урын Радик Ғәзәйеров урамында ошо үҙәк менән йәнәш бирелгән. Ике мөһабәт бина, бер-береһен тулыландырып, тамамланған архитектура комплексын тәшкил итә. Өлгөргән ҡарағайҙан һалынған, ауылдың биҙәгенә әйләнгән мәсеттең бейеклеге манаралағы ярымайға тиклем 17 метр.

Мәсет Кинйә Арыҫланов исемендәге Хәйриә фонды президенты Марс Юлбарыҫов ярҙамы һәм етәкселегендә төҙөлгән. Ул мәсеткә ҡәҙерле һәм хөрмәтле өләсәһенең исемен ҡушҡан. Шулай итеп, Кинйә Арыҫланов ырыуы вәкиле Өммөгөлсөм Шангәрәй ҡыҙының исеме Үрге Биккужаға мәсет булып ҡайтты.

Иман йортон асыу тантанаһында абруйлы ҡунаҡтар: район хакимиәте башлыҡы Фәрит Мусин, Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт, Хәйриә фонды вәкилдәре Марс һәм Салауат Юлбарыҫовтар, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Рафаил Зинуров, Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Рәмил Мәжитов, ЮНЕСКОның Урал-Себер Федерацияһы генераль ҡаҙнасыһы Юрий Борисихин ҡатнашты. Ҡыҙыл таҫма киҫелеү менән мосолмандарҙың тәүге төркөмө намаҙға баҫты, ә башҡа ҡунаҡтар өсөн ауыл клубында концерт күрһәтелде.

Мәктәп ашханаһында тантана алдынан ғына салынған һарыҡ итенән ҡорбан ашы ойошторолдо. Шулай итеп, Үрге Биккужа ауылында аҡлыҡ, паклыҡ, сафлыҡ йорто - мәсет сафҡа инде.

## Сауаплы ғәмәлдәр байрамы

***Яңыбайҙар ҡылған изге ғәмәлдәр***

В. БОРИСОВ

**"Әссәләмү-ғәләйкүм вә рәхмәтуллаһу вә бәрәкәтуһ", - тип сәләмләүҙе беҙ йышыраҡ Аллаһ йортонда ишетәбеҙ. Ул күңелдәрҙе яҡынайта, берләштерә, аңлатып биргеһеҙ хис-тойғоларға сумдыра. Шул мәлдә һәр ҡайһыбыҙ тиң була: арабыҙҙа байҙар ҙа, түрәләр ҙә ҡалмай, туғандарса мөнәсәбәт урынлаша. Мәсеткә ингән һәр бер кеше үҙен яҡлаулы тоя, мохтаждар ярҙам алырына шикләнмәй. Ә Ҡорбан байрамын мосолмандар айырыуса көтөп ала.**

Балаҡатай районының Яңыбай ауылы мәсете, тирәяҡҡа йәм биреп, күҙ күрке булып, күңелдәрҙе сафландырып, изге эштәр ҡылырға саҡырып тора. Халыҡ бында күпләп килә, доға, намаҙ уҡый, саҙаҡа бирә. Ә байрам көндәрендә изге урын уғата йәнләнә: йәше лә, олоһо ла берҙәй Хаҡ Тәғәләбеҙгә ғибәҙәт ҡылырға ынтыла. Зөфәр хажи Шағбанов, Ҡорбан хәҙрәт Ханов, менән Әбдрәзәк Закиров һәр кемде яҡты йөҙ менән ҡаршылай, ғәмәлдәрен тормошҡа ашырырға ярҙам итә, изге теләктәр менән оҙата.

- Мәсетебеҙ ауыл халҡы көсө, район ойошмалары, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Николай Крюков ярҙамы менән 1997 йылда төҙөлдө. Һуңғы йылдарҙа "Нефтехим" тәжрибә заводы" ябыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Риф Саматовтың күрһәткән матди ярҙамы ҙур", - ти Зөфәр Шағбанов. - Шунан бирле Аллаһ йортонан халыҡ өҙөлгәне юҡ. Йома намаҙҙарына йыйылыусылар өс тиҫтәләп булып китә. Ә Филүс Нәжметдинов, Инсаф Мырҙаҡамалов, Тимер Мөхәмәтғәлин, Хоҙайдут менән Сәфәр Әминевтәр, Рима һәм Рәхит Фәрхитовтар намаҙҙарҙы ҡалдырмаҫҡа тырыша. Флүрә Фазылова, Гөлсимә Ниязова, Гөлсөм Шағбанова ла иң әүҙемдәр рәтендә.

Мәсеткә йөрөүселәр араһында үҫеп килгән быуындың күп булыуы шатландыра. Малайҙар ҙа, ҡыҙҙар ҙа бында теләп килә. Намаҙға баҫырға теләгәндәре лә юҡ түгел. Тимәк, ауылыбыҙ киләсәге иманлы йәштәр ҡулына күсәсәк.

Ҡорбан байрамында Яңыбай мәсете гөрләп торҙо. Килгән берәү изге йорттан күңеленә тыныслыҡ, байрам кәйефе алып ҡайтты. Ҡорбан салғандар мохтаждарға итен өләште, хәйерен таратты, табын ҡороп, мосолман ҡәрҙәштәрен тәмле аштар менән һыйланы.

Күп өйҙәрҙә Ҡөрьән уҡылды, доға һәм вәғәҙәр яңғырады, был көндә барыһы ла сауаплы эштәр башҡарырға тырышты.